**Шежере темаһына эҙләнеү**

План

Шәжәрә - сал тарихҡа бағыр тәҙрә

1.Инеш.

2. Төп өлөш:

Минең шәжәрәм.

Шәжәрәләрҙе төҙөү төрҙәре.

Туғандарым тураһында мин нимәләр белдем?ң

3. Йомғаҡлау.

4. Ҡулланылған әҙәбиәт.

Инеш.

Шәжәрә- сал тарихҡа бағыр тәҙрә,
Күҙ яҙҙырһаң, шул тәҙрәнән атыр йәҙрә.
Ал бер үрнәк – бал ҡорттары төҙөй кәрәҙ,
Һин дә ятма: ҡор ояңды. Үр шәжәрә!..
Шәжәрәмдә - сал тарихы балаларҙың,
Бөгөн дә, киләсәгем, балаларым.
Шәжәрәһе – башҡортомдоң ал ҡанында!

Ҡәҙим Аралбаев.

Шәжәрә - ырыу тарихы, теге йәки был ҡәбилә, ырыу йә араның быуындар йылъяҙмаһы. Шәжәрә - борон-борондан ырыу-араның документы, икенсе төрлө әйткәндә, бер туған кешеләрҙең дөйөм танышмаһы ла булып һаналған. Башҡорттар борон-борондан үҙ тарихи ваҡиғаларын шәжәрәһенә яҙып барған.

Ағас – тамырһыҙ, кеше тарихһыҙ булмай. Хатта сүллектә тәгәрәп йөрөгән ҡамғаҡ та бит тәүҙә ергә берегеп үҫә (тәгәрәүе лә маҡсатһыҙ түгел – орлоҡтарын сәсер өсөн). Ә беҙҙең һәр беребеҙҙең сал быуаттарға барып тоташҡан меңәрләгән йыллыҡ тарихы бар. Үкенескә күрә, уны тулыһынса тергеҙә алмайбыҙ. Сөнки күп мәғлүмәт билдәһеҙлек томаны артында тороп ҡалған-юйылған. Ләкин ҡайһы бер ғаиләләрҙә егерме бишенсе быуынға тиклем шәжәрәләр төҙөлөп, һаҡлана. Был заманында үҙ тарихына битараф булмаған атай-олатайҙарҙың хеҙмәте – киләһе быуындар өсөн ысын хазина!

Төп өлөш.

Шәжәрә төҙөү боронғолоҡҡа ҡайтып ҡала. Иң тәүҙә мәғлүмәттәр телдән быуындан-быуынға күсеп килгән. Яҙма барлыҡҡа килгәндән һуң, таштарҙа, балсыҡ таҡталарҙа, туҙҙа һәм ҡағыҙҙа яҙылып, беҙгә тиклем килеп еткән мәғлүмәттәр бар. Ғөмүмән, генеалогик ағас – шәжәрә ағасын төҙөү, белеү кеше күңелендә бөләкәй тыуған илгә, ергә ҡарата һөйөү тойғоһо уята. Ғаилә архивын, ата-олатайҙарҙың фотографияларын, боронғо реликвияларҙы, хәтирәләрҙе барлау әйтеп бөткөһөҙ баһаға эйә. Бында быуындар күсәгилешлеге, фамилия намыҫын һаҡлау нигеҙе, ата-олатайҙарға ҡарата ихтирам тәрбиәләү сағыла. Унан тыш, үҙеңдең шәжәрәңде белеү физиологик күҙлектән дә мөһим, юғиһә ҡан ҡәрҙәштәрен белмәү арҡаһында ете быуынға

тиклем бер зат-ырыуҙан булған йәштәрҙең өйләнеүе ихтимал, ә ҡан ҡушылыуы нәҫел сәләмәтлеге өсөн хәүефле. Һәм, ниһайәт, шәжәрәһен белгәндәр затындағы күренекле кешеләргә оҡшарға тырыша.

Шәжәрәне нисек төҙөргә һуң?
Шәжәрәне ағас рәүешендә төҙөргә, түңәрәктәр, табличкалар менән күрһәтергә мөмкин. Иң мөһиме, бер быуын кешеләрен бер горизонталь һыҙыҡта урынлаштырырға кәрәк. Тағы бер шарт. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгендә шәжәрә төҙөүселәр шәжәрә ағзаларының ғүмер йылдарын күрһәтмәй төҙөлгәндәрен һанға һуҡмай.
Ә беҙ бөгөн шәжәрәне түбәндәге схема буйынса төҙөнөк,сөнки шәжәрәне тик ир-ат яғынан ғына төҙөү бөгөнгө көндә дөрөҫ үк түгел. Унда ҡатын-ҡыҙ заты вәкилдәрен дә ҡушырға кәрәк, тип иҫәпләйбеҙ. Никах теркәгәндә ҡатын-ҡыҙ яғынан да туғанлыҡ мөһим.

Мин – беренсе быуын, иң өҫкә ҡуйыла.

Икенсе быуын: Атайым – ... Әсәйем...

Өсөнсө быуын: Атайымдың атаһы (йәғни атайым яғынан ҡартатай). Атайымдың әсәһе (атайым яғынан ҡартәсәй). Әсәйемдең атаһы (әсәйем яғынан ҡартатай). Әсәйемдең әсәһе (әсәйем яғынан өләсәй).

Дүртенсе быуын:ҡартатайымдың атаһы (атайым яғынан ҡарт ҡартатай). Ҡартатайымдың әсәһе (атайым яғынан ҡарт ҡартәсәй). ҡартәсәйемдең атаһы (атайым яғынан ҡарт атай). Ҡартәсәйемдең әсәһе (атайым яғынан икенсе ҡарт ҡартәсәй). Артабан әсәй яғынан ике ҡарт ҡартатай һәм ике ҡарт өләсәй. Шулай итеп, быуындан-быуынға дауам ителә. Былдай схема буйынса шәжәрә ағасының өсөнсө быуынында һигеҙ кеше була, дүртенсеһендә – 16, бишенсеһендә – 32 һ. б. Күреүегеҙсә, былдай схема буйынса бөтәһен дә табыуы ҡыйын. Ул саҡта шәжәрә ағасының һәр ағзаһы өсөн һеҙ һайлаған түңәрәк, квадрат йәки башҡа берәй билдәне буш килеш ҡалдырыу яҡшыраҡ.

" Ҡарағай ҙа ағас бейек ағас

Юл ҡарамай барыу ярамай.
Ҡайҙа ла ғына бармай кәңәш кәрәк,
Кәңәшле лә зиһен тара(л)май.
Был ҡарт ҡартатайымдың яратҡан йыры булған.
Йомғаҡлау
Әйтелгәнгә йомғаҡ яһап, үҙ шәжәрәһен төҙөргә теләгәндәргә бер нисә кәңәш:
1. Эште ата һәм әсә яғынан бөтә туғандарҙы асыҡлауҙан башларға кәрәк. Тереләрҙең тыуған йылын, үлгәндәрҙең йәшәгән йылдарын да онотторға ярамай.
2. Горизонталь шәжәрә төҙөгәндән һуң уларҙы вертикаль буйынса

берләштереп ҡарарға кәрәк. Бөтә ейәндәр – артабан атайҙар – шунан олатайҙар – ҡарт олатайҙар. Шулай эшләгәндә, фамилияғыҙ кемдән башланыуын асыҡларға мөмкин. Был башҡорттар өсөн мөһим, әлбиттә, сөнки халҡыбыҙҙа даими фамилиялар совет осоронда ғына индерелә. Ауылда һәм тирә-яҡтағы ауылдарҙа һеҙҙең ырыуығыҙға тағы ниндәй фамилиялар ҡарағанлығын белегеҙ. Зат-ырыуығыҙ вәкилдәре тормошонан фәһемле эпизодтарҙы белергә, ҡыҙыҡлы документтар, фотографиялар табырға тырышығыҙ.

3. Сит яҡтарҙа йәшәгән туғандар менән бәйләнешкә инеп, мәғлүмәттәр йыйырға.

4. Мәғлүмәттәрҙе (тыуған йылдарын, мөһим ваҡиғаларҙы һ. б.) асыҡлағандан һуң шәжәрә ағасын төҙөүгә тотоноғоҙ.

Үҙ халҡыңдың мәҙәниәтен, үткәнен, бөгөнгөһөн өйрәнеү, тыуған яҡтың тарихы менән танышыу – изге эш. Быуындар араһында бәйләнеш булдырыу һәм нығытыу, туғанлыҡты танытыу, нәҫел тармаҡтарын барлау һәр ырыуҙаштың үҙ нәҫел тармағы алдында яуаплылығын көсәйтә.

Илен белмәгән – белекһеҙ, нәҫелен белмәгән – намыҫһыҙ, тиҙәр. Шуның өсөн беҙ барыбыҙ ҙа үҙ нәҫелебеҙҙең тамырҙарын, тыуған еребеҙҙең тарихи үткәнен белергә һәм өйрәнергә бурыслы.

Тамырын тойған ағас ҡына үҫә, нығый, емеш бирә, ә тамырһыҙы ҡорой. Үҙ нәҫел тамырҙарыбыҙҙы өйрәнәйек, ата-бабаларыбыҙҙы онотмайыҡ, йолаларыбыҙҙы үтәйек, ырыу тамғаларыбыҙҙы beләйек.